# *Тел – халык хазинаһы*

**Бөгөн беҙҙә башҡорт теле**

**Яратам һине телем!**

**Рәхмәт һиңә! Һинең аша**

**Алам мин яҡшы белем!**


БАШҠОРТ
ТЕЛЕ


Ф.Г. ХИСАМИТДИНОВА
БАШҠОРТ ТЕЛЕ
Ф.Г. ХИСАМИТДИНОВА
БАШКИРСКИЙ
ЯЗЫК


Мустай Карим
Хашим Мустаев
Жемчужина Башкортостана Янган-Тау
Геологические памятники природы Республики Башкортостан
РЕСПУБЛИКА БАШКОРТОСТАН
БАШКИРСКАЯ ЭНЦИКЛОПЕДИЯ
ПРОРЫВ
башинформ


ИСТОРИЯ БАШКИРСКОГО НАРОДА
ИСТОРИЯ БАШКИРСКОГО НАРОДА
ИСТОРИЯ БАШКИРСКОГО НАРОДА

***Башҡорт теле*** — төрки тел, башҡорт халҡының теле. Ҡыпсаҡ төркөмөнөң волга буйы-ҡыпсаҡ төркөмсәһенә ҡарай. Төп диалекттары: көнсығыш, төньяҡ-көнбайыш һәм көньяҡ.

Башҡорт теле Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булып тора. Уның дәүләт теле булараҡ (урыҫ теле менән бер рәттән) юридик статусы тәү башлап Башревкомдың 1920 йылдың 24 мартындағы положениеһы менән билдәләнә. Хәҙерге осорҙа был положение тәғлимәттәре Башҡортостан Республикаһы Конституцияһынында нығытылған.

Башҡорт теле башланғыс һәм урта мәктәптә уҡыу-уҡытыу сараһы һәм өйрәнеү предметы булып тора, юғары уҡыу йорттарында гуманитар предметтарҙы уҡытыу сараһы итеп файҙаланыла һәм предмет булараҡ өйрәнелә. Башҡорт телендә уҡыу әсбаптары, нәфис һәм публицистик әҙәбиәт нәшер ителә, гәзит һәм журналдар сыға, телевидение һәм радио тапшырыуҙары алып барыла, театрҙар эшләй.

Донъяла башҡорт телендә 1,2 млн кеше һөйләшә. 2010 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙә башҡорт телен 1 152 404 кеше белә, шул иҫәптә 977 484 башҡорт, 131 950 татар,

20 258 урыҫ, 6 276 сыуаш, 3 211 мари, 1 953 ҡаҙаҡ,

1 630 удмурт, 1 279 үҙбәк һәм 8 363 башҡа милләт вәкилдәре бар.

Башҡорт
теле

# *Телдең барлыҡҡа килеү тарихы*

Башҡорт теленең тарихы дүрт дәүергә бүленә:

- Урал-Алтай (боронғо ҡатлам, агглютинативлыҡ һәм алтай телдәренә хас башҡа һыҙаттар формалаша)
- дөйөм төрки (төп һүҙ фонды, төп фонетик һәм бөтә төрки телдәр өсөн уртаҡ булған башҡа үҙенсәлектәр хасил була)
- ҡыпсаҡ (ҡыпсаҡ төрки телдәренә хас фонетик, лексик һәм башҡа үҙенсәлектәр барлыҡҡа килә)
- башҡорт теле үҙе.

Башҡорт теле ҡыпсаҡ төркөмөнә ҡараһа ла, уның болғар (сыуаш теле диалекттары), уғыҙ (төрөкмән теле, төрөк диалекттары) һәм себер (алтай, тыва, хакас, яҡут, боронғо төрки ҡомартҡылары теле) телдәренә хас үҙенсәлектәре бар. Башҡорт теленең апеллятив лексикаһында ротацизмлы һәм ламбдацизмлы һүҙҙәрҙән ҙур ҡатлам булыуы башҡорт теленең формалашыуында болғар компонентының әһәмиәте тураһындағы гипотезаның нигеҙенә ятты· А. В. Дыбоға ярашлы, башҡорт теле бер нисә тапҡыр ҡыпсаҡлаштырыуға дусар булған уғыҙ телдәренә инә.

Башҡорт теленең ҡайһы бер үҙенсәлекле айырмалыҡтары иран, фин-уғыр, монгол, тунгус-манжур һәм славян телдәре менән үҙ-ара тәьҫир итешеү һөҙөмтәһе булып тора.
Башҡорттар ислам динен ҡабул иткәндән һуң башҡорт теле башҡа телдәрҙең һиҙелерлек йоғонтоһо аҫтына эләгә: ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренең күпләп инеүе телдең лексик һәм фонетик структураһын үҙгәртә. XX быуатта башҡорт-урыҫ ике теллелеге киңәйеү сәбәпле, телдең фонетикаһына яңы үҙгәрештәр инә.

1918 йылдың ғинуарында Башҡорт Хөкүмәте автономиялы идаралыҡ тураһындағы положение проектының айырым параграфында эске автономиялы идаралыҡта һәм судта башҡорт теле рәсми тел булыуын билдәләй. 1920 йылдың 24 мартында Башревком Башҡорт АССР-ы территорияһында башҡорт теленең дәүләт статусы тураһындағы положениены хуплай. Был ҡарар нигеҙендә Ревком пленумы 1920 йылдың 28 мартында республика биләмәһендә башҡорт һәм урыҫ телдәрен дәүләт телдәре итеп иғлан итә.

1921 йылдың 27 июнендә РКП (б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты ҡабул иткән резолюцияла башҡорт телен дәүләт теле тип таныу һәм бөтә уҡыу һәм хәрби-уҡыу йорттарына башҡорт телен мотлаҡ уҡытыуҙы индереү тураһында әйтелә. 1921 йылдың 1-4 июлендә Советтарҙың II Бөтөн башҡорт съезы була, ул башҡорт теленең республика территорияһында тулы хоҡуҡлы дәүләт теле булыуы тураһында иғлан итә.

БашҮБК ҡарарына ярашлы, бөтә хөкүмәт декреттары һәм бойороҡтары ике дәүләт телендә (башҡорт һәм урыҫ) сығарылырға тейеш була.

Башҡорт АССР-ының 1925 йылғы Конституцияһына ярашлы, «Башҡорт АССР-ында башҡорт һәм урыҫ телдәре рәсми тел булып тора».

Бөгөн беҙ **Ф.Ғ.Хисамитдинованың «Башҡорт теле» («Башкирский язык»)** исемле китабы менән танышып утәбеҙ. Был китап – интенсив курс, башҡорт телен өйрәнеүселәр өсөн уҡыу ҡулланмаһы.



Ф.Ғ. ХИСАМИТДИНОВА

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ

## Интенсив курс

Башҡорт телен өйрәнеүселәр өсөн
уҡыу ҡулланмаһы

КИТАП

Ф. Г. ХИСАМИТДИНОВА

# БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК

## Интенсивный курс

Учебное пособие
для изучающих башкирский язык

КИТАП

Был китап бик уҙенсәлекле һәм мауыҡтырғыс. Дәреслектәргә бүленгән. Бөтәһе 25 дәреслектән тора.Тағы ла, бирелгән дәрестәрҙән башҡа, башҡорт теленең ҡыҫҡаса грамматикаһы һәм башҡортса-урыҫса һүҙлек бирелгән.



# Хисамитдинова Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы

# Хисамитдинова Фирҙәүес Ғилмитдин кыҙы

**Хисамитдинова Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы** (1 ғинуар1950 йыл) — дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, ғалим-башҡорт теле белгесе, юғары мәктәп уҡытыусыһы. Башҡортостан Республикаһының 1-се саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаты (1994—1999). Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы (2016), филология фәндәре докторы (1993), профессор (1994). Рәсәй Федерацияһының (2008) һәм Башҡортостан Республикаһының (2003) атҡаҙанған фән эшмәкәре. Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры (2014). Ким Әхмәтйәнов исемендәге (2010), Рәми Ғарипов исмеедәге (2016) премиялар лауреаты.

Китаптың беренсе бите инеш һүҙ менән башлана. Бында  автор тел, үҙенең китабы тураһында һүҙ алып бара.

### *ИНЕШ ҺҮҘ*

## ПРЕДИСЛОВИЕ

В нашей республике проживают представители более ста национальностей. Язык каждого народа защищен Конституцией Российской Федерации, Конституцией Республики Башкортостан, Законом РФ «О языках народов РФ», Законом РБ «О языках народов Республики Башкортостан». Этими же законами определены и государственные языки. Таковым в Российской Федерации является русский язык. В Башкортостане же два государственных языка — русский как государственный язык РФ и башкирский как язык башкирской нации, реализовавшей свое право на самоопределение. Придание государственного статуса башкирскому языку не противоречит ни Конституции РФ, ни Закону РФ «О языках народов РФ». В частности, в главе 1 статье 3 § 3 российского закона о языках отмечено, что республики в составе РФ могут устанавливать статус государственного языка республики в составе РФ.

Русский язык и как государственный, и как родной в Башкортостане имеет прочные позиции. Его знает каждый житель республики. К сожалению, позиции второго государственного языка — башкирского не столь прочны, несмотря на введение его изучения в школах и других учебных заведениях республики. Между тем, государственный статус башкирского языка вызывает необходимость его знания всем населением, проживающим на территории РБ. Для обучения любому языку необходимы учебники, учебные пособия, самоучители, разговорники. В последние годы в республике издано множество учебников башкирского языка для русскоязычных школ, выпущены программы, словари, методические разработки, пособия для широкого круга людей, желающих изучить башкирский язык. В результате есть и некоторые успехи в обучении башкирскому языку. Этому способствовало не только лингвометодическое обеспечение обучения и изучения башкирского языка, но и рост самосознания у башкир, проявление уважения к истории и культуре Башкортостана, башкир у небашкирского населения республики. Что же касается лингвометодического обеспечения процесса обучения башкирскому языку, то количество, к сожалению, пока не переросло в качество. Во многих учебниках основным принципом обучения башкирскому языку остается грамматический принцип и вместо обучения говорению изучаются грамматические правила,



разрозненные слова. Лишь в последние годы под влиянием современных методов обучения иностранным языкам появились учебные пособия, построенные на коммуникативном методе, который предполагает обучение не только чтению, но и говорению на башкирском языке.

Данное учебное пособие является одной из попыток автора помочь в изучении башкирского языка, не заучивая сложные грамматические правила и громадный лексический материал, что обеспечивается ситуативно-тематическим подбором языкового материала и особым отношением к лексическому и грамматическому материалу, при котором каждый урок является продолжением предыдущего как по словарному составу, так и по грамматическим формам, которые вводятся в уроки с постепенным наращиванием. Безусловно, такой подход к изучаемому материалу, многочисленные диалоги, тексты, различные типы упражнений, формы проверок усвоения материала, богатый лингвострановедческий и общекультурный материал будут способствовать быстрому усвоению башкирского языка и вы, дорогие друзья, заговорите по-башкирски!

Для облегчения изучения башкирского языка, усвоения мелодики башкирской речи к учебному пособию прилагается компакт-диск с записью наиболее важных фрагментов каждого урока. Озвученный материал отмечен соответствующим значком. С 1 по 5 урок материал представлен на башкирском и русском языках. С 6 урока переводы даны не ко всем текстам.

*Успехов Вам, друзья! Уңыштар Һеҙгә, дуҫтар!*

*Ф. Г. Хисамитдинова*

Дәрестәрҙә башҡорт теле, Башҡортостан тураһында шиғырҙар, өҙөктәр ҡулланыла. Туған телде яҡшыраҡ өйрәнеү өсөн ҡыҫҡаса грамматика, диалогтар, күнегеүләр бирелә.



# БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,
Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин,
Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы ла һин,
Эй, илһамлы, эй, хөрмәтле башҡорт теле!

Күгәреп ятҡан Уралыңдай бай, йомарт һин,
Серле ҡамыш ҡурайыңдай ҡарт, олпат һин,
Күпте күргән сәсәнеңдәй йор, зирәк һин,
Эй, һөйөклө, эй, ҡәҙерле башҡорт теле!

Диңгеҙҙәргә тиңләмәйем — тәрәнһең һин,
Айға-көнгә тиңләмәйем — гүзәлһең һин,
Ҡаяларға тиңләмәйем — бөйөкһөң һин,
Эй, хикмәтле, мәрхәмәтле башҡорт теле!

Күп быуаттар һин йырланың ҡурай моңон,
Күп быуаттар һин йырланың яугир юлын,
Инде азат. Шат. Йырлайһың еңеү йырын,
Эй, бәхетле, эй, ҡәҙерле башҡорт теле!

Иң тәү минә һин күрһәттең дуҫлыҡ юлын,
Минең өсөн һин бит йәшәү, бәхет үҙең,
Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,
Атам теле, әсәм теле — минең телем!

Зәйнәб Биишева


P

Год
башкирского
языка

Башҡорт
теле
йылы




БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН
ХАЛЫҠ-АРА ДИКТАНТ

МЕЖДУНАРОДНЫЙ ДИКТАНТ
ПО БАШКИРСКОМУ ЯЗЫКУ